*Рәйес ТҮЛӘК*

# Иблис көлгән ерҙә илай фәрештәләр...

"Иблис көлгән ерҙә илай фәрештәләр" тип, тормоштоң ни рәүешле ҡапма-ҡаршылыҡтарына тарып, ниҙәр кисереп яҙҙы икән Байрон? Иблис — фәрештә, көлөү — илау...

Ғәҙәттә оло йылғалар тын тәбиғәтле, тын ағымлы булыусан. Был шартлылыҡ күпмелер дәрәжәлә әҙәбиәттә лә күҙәтелә кеүек ине. Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй" романын уҡығандан һуң ҡараш үҙгәрә: әҫәр киң, тәрән булыуына ҡарамаҫтан, бөгөлдәр, ҡултыҡтар яһай-яһай шаулап аҡкан тау йылғаһын хәтерләтә...

Александр Грин, донъяла кеше иғтибарын һәр саҡта ла йәлеп итеп торорлоҡ өс мәңгелек тема бар, тип әйтеп ҡалдырған: тормош-көнкүреш, мөхәббәт һәм үлем. "Бөйрәкәй" романында был өс тема шундай нәзәкәтле итеп үреп күрһәтелгән — яҙыусының оҫталығына һоҡланмау, ошо оҫталыҡтың серҙәрен өйрәнергә ынтылыш яһап ҡарамау мөмкин түгел. Ә инде был өс теманың бергә осраған сағын бер генә һүҙ менән "яҙмыш" тип тә әйтеп булыр ине.

Романда егерменсе быуат дауамындағы төрлө сүрәттәге, төрлө дәрәжәләге социаль катаклизмдарҙың әҙәмдәр яҙмышын ни ҡәҙәрле аяуһыҙ ойпалауы бәйән ителә. Оло ил масштабында, аҡылдар иңләмәҫлек киңлектәрҙә хасил булған ғәрәсәттәргә кешеләрҙең үҙ-ара бер-береһенә ҡылған әшәкелектәре, мәкерлектәре өҫтәлә. Гүйә бер мөһабәт олон, ана һынам — бына һынам, тип сайҡала, һәм ошо олонда оҙағыраҡҡа ҡалыр өсөн, һутын күберәк һурыр өсөн, япраҡтар ҙа үҙ-ара тартҡылаша. Алмаш-тилмәш тыуып торған афәт, бәлә-ҡазаларҙан ҡаҡшаған, һәр ҡайһыһы үҙенә генә хас ҡайғыһын, хатта оҡшаш ҡайғылар йөрөткәндәре лә ваҡытлыса ғына булһа ла шатлыҡҡа тейенер өсөн бер-береһе менән хаслаша. Хатта ошо йолҡоп, талап, алдап алынған бәләкәй генә бәхет киҫәге өсөн аҙаҡ ҙур ҡайғылар, юғалтыуҙар менән түләйәсәктәрен белеү ҙә кеше нәфсеһенең был аҙғынлығын тыйып туҡтата алмай. Сарсауҙарын, танһыҡтарын бер ҡандырыу өсөн улар ғәйептәренән тыуған үҙ балаларын үлтереүҙән дә, үкһеҙ етем баланың яңғыҙ һыйырын урлап һуйыуҙан да, бер туған һеңлеһен психушкаға яптырып, уның сабыйын үҙләштереүҙән дә тартынмайҙар. Кешеләрҙең сараһыҙлығын — физик, йә психологик, йә матди мохтажлығын, тәжрибәһеҙлеген үҙҙәренең әлеге

төпһөҙ-сикһеҙ нәфселәрен ҡәнәғәтләндереү өсөн файҙаланалар. Ләкин, әҙәм бәхетенә күрә, төндөң көнө, мәғриптең мәшриҡе булған кеүек, тормош та Ихсанбай йә Лоҡман кеүектәрҙән генә тормай. Иңдәренә төшкән тормош ауырлығын башҡаларға зыян килтермәй генә еңеп өйрәнгән, талап-йыйып ҡына түгел — нур сәсеп, изгелек өләшеп йөрөп тә йәм таба белгән Күкһылыуҙар, Мәҙинәләр, Маһинурҙар, Раузалар, Хөсәйендәр бар. Ялған хаҡлыҡты, яуызлыҡ изгелекте баҫып алмаһын өсөн улар араһында, ил сиктәрендә торған һаҡсылар кеүек, Фәүзиә-Барсынбикәләр, Камалетдиновтар, иң ғәжәбе — Шәңгәрәй кеүек диуаналар бар. Ә бит улар барыһы ла Ерҙең көнө менән төнө, йәйе менән ҡышы кеүек бер үк... эйе, бер үк күсәрҙәләр, бер үк тамырҙалар. Шағир әйтмешләй: көн дә тыуа көнсығыштан, төн дә тыуа көнсығыштан. Тап ошоноң кеүек, матурлыҡ, изгелектең символик һынланышы дәрәжәһенә күтәрелгән Гөлбаныу менән хаслыҡ тамғаһына әүерелгән Ихсанбайҙың бер туғандар итеп күрһәтелеүе — авторҙың оло уңышы. Ошо ике образ Саҡ менән Суҡ кеүек айырылышып та китә алмай, бергә булыу хоҡуғынан да мәхрүм. Был хәл — ижад эшендәге иң төп диалектика закондарының береһе. Йәғни, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың берлеге һәм өҙлөкһөҙ көрәше. Автор был законды уҡыусыларҙы ышандырырлыҡ итеп, логик-философик-психологик яҡтан да бер йөйһөҙ һәм етди нигеҙләүгә өлгәшкән. Әҫәрҙәге башҡа ваҡиғалар араһында ул күренеш күҙ көйөгө булып тупаҫ рәүештә һерәйеп күренеп тә тормай, шул уҡ ваҡытта юғалып та ҡалмай, ә әҫәрҙең арҡа һөйәге булып, барлыҡ хәл-ваҡиғаларҙы үҙенә туплап, аҙаҡҡаса дауам итә.

"Был китапҡа тотош быуат һыйған. Ниндәйҙер мөғжизә менән тарих китаптары юҡҡа сыҡһа, Таңсулпан Ғарипованың роман-эпопеяһы буйынса егерменсе быуатты ҡайтанан тергеҙеп булыр ине. Тарих тирмәненә бойҙай бөртөктәреләй төшкән кеше яҙмыштары матурлыҡҡа һәм батырлыҡҡа һынау тота. Бәғзеһе онға әйләнә, бәғзеһе — кәбәккә..." — тип яҙғайным авторҙың "Бөйрәкәй" пенталогияһы аннотацияһына.

Ағып ятҡан йылға һәр осраҡта ла ике ярлы була. Бер генә ярлы булған һыу массаһы "күл" тип атала... Тормош йылғаһы ла, тап ана шул беҙ күреп белгән йылғалар кеүек, мөхәббәт һәм нәфрәт ярҙары араһынан аға. Кешелек тарихының башында уҡ, Тәүатабыҙ Әҙәм менән Тәүәсәбеҙ Һауаның ике улы тыуып, береһе Аллалар менән аралашып мөхәббәтле булып китеүе (Авель), икенсеһе иблистәр менән ҡатнашып күңелендә нәфрәт йөрөтөүсегә әйләнеп китеүе (Каин) хәл-күренеше кеүек... Хас та үҙебеҙҙең эпостағы Урал менән Шүлгән образдары кеүек... Эйе, йәмғиәттә йәшәүселәр донъяға ҡараштары менән ошондай ике ярға айырылған кеүек, һәр кемебеҙҙең күңелдәрендә лә бар ул изгелек менән яуызлыҡ "ярҙары", мөхәббәт һәм нәфрәт "ярҙары". Һәр кемебеҙҙең үҙен уратып алған мөхит менән үҙ-ара мөнәсәбәттәребеҙ үҙенсәлегенә, холҡобоҙға ҡарап, кемебеҙҙәләр шүлгәнлек, кемебеҙҙәләр ураллыҡ өҫтөнлөк ала.

Әҫәр фабулаһының иң тәүге ваҡиғаһы итеп Таңсулпан Ғарипова юҡҡа ғына төп геройҙарының (Диңгеҙбай, Барсынбикә, Ихсанбай) йылғаның бер ярынан ҡаршы яҡ ярына сығыу ваҡиғаһын ҡуймай. Ҡараңғы төн.

Эйәреп килгән шаһит үлтерелә. Исемдәр алмаштырыла, хәҙер улар: Сибәғәт, Фәүзиә, Ихсанбай. Тәрән тамырлы, һокланғыс, шанлы шәжәрәһе булған ғаилә — әлеге "ҡаршы яр"ға сығып — бөтөнләй ялған документтар менән, бөтөнләй яңы йәмғиәт ҡоролошонда яңыса йәшәй башлай. Теге ярҙа бик күп байлыҡтар менән бергә тағы ла бер үкенес тороп ҡала — йүргәккә төрөлгән Күкһылыу. Теге ярҙа тороп ҡалған өйөр-өйөр йылҡылар һәм йүргәктәге Күкһылыу аҙаҡ инде әҫәрҙең төп этәргес көсөнә әйләнә: үкенеүҙәргә, ҡурҡыуҙарға, асыу-нәфрәттәргә, өмөт итеүҙәргә. Әлегә барлыҡ йыуаныстары — үҙҙәре менән бергә әлеге — ҡәһәрле тиергәме — йылғаны аша сыҡҡан Ихсанбайҙары. Әле әсәһе ҡарынында уҡ, был хаҡта әҫәрҙә әйтелмәһә лә, Ихсанбай ошо ике төрлөлөккә тарый, әле лә әсәһе ҡуйынында килеш йылға аша сығыу ваҡиғаһы уның да мәжбүри рәүештә ҡәҙимгелек ярынан ҡаршы ярға сығырға мәжбүр булыуының символик һүрәтләнеше. Артабан Ихсанбай ҡылыҡтарының, барлыҡ гөнаһтарының нигеҙе, тамыр осо ошо һүрәтләнештә бирелә. Гендарына һалынған ханлыҡ-тарханлыҡ орлоҡтарына ҡапма-ҡаршы йәшәү рәүеше ҡаршылай уны был ярҙа. Шуның өсөн дә һыя алмай ул бындай тәртиптәр улағына. Оҙаҡ та үтмәй, пионер галстугын мәктәпкә инер алдынан ғына тағып, сығыу менән сисеп кеҫәһенә һалып ала торған булып китә. Бына нисегерәк һүрәтләй был тәңгәлде автор: "...Ихсанбай бит ғүмере буйы йылғаның ике ярылай, икегә бүленеп, үҙе йәшәгән тормошто яратмай, шикләнеп, икеләнеп йәшәне. Ихсанбай: "Йәшәһен партия, коммунистар!" — тине, ә әсәһе: "Зилзилә, вәхшиҙәр", — тип ҡарғанды... Бына ошо рәүешле уны һәр ваҡыт ғаиләһендә бер төрлө "яр", ғаиләһенән ситтә ҡаршы "яр" һағалар булып китә.

— Был ниндәй галстук булһын?! Күпме әҙәмдең башына еткән әлмәк был, — ти әсәһе башҡалар ыңғайына пионерға инеп, шатлығынан сәсәр сиккә етеп ҡайтып ингән Ихсанбайға.

— Таҡмайыммы әтү? — Аптыранған малай бер әсәһенә, бер атаһына ҡараны.

— Тағаһың инде... таҡмай ҡайҙа бараһың? Һин тыуғанға тиклем үк тағылғайны бит ул...

— Әлмәк булғас, мин уға быуылып үлеп ҡуймаммы?

— Үҙеңде түгел, хәтереңде быуыр өсөн уйлап табылған нәмә ул.

— Хәтерем барсы минең...

— Хәтерең булғас, һин миңә ете быуыныңды, ырыуыңды, ил һаҡлаған батырҙарҙы һанап күрһәт!"

Бына ошондай ике яр араһында бәргесләнә-һуғыла донъяға сыға Ихсанбай. Ошо мөхәббәт һәм нәфрәт, изгелек-яуызлыҡ кеүек ҡаршылыҡлы ярҙарға һуғылғанда ғына характер тыуа, үҫешә. Йылға уртаһынан, ағым ыңғайына аҡҡандар тураһында китап яҙылмай.

...Бер нәмә лә үҙгәрмәне, тип дауам итә автор һуңғараҡ, кеҫәһендә йөрөгән галстуктай, уйы — бер, эше икенсе булды. Йылға аша сыҡҡандағы ошо символик хәлителеш, йәғни, Күкһылыуҙың бер ярҙа (табып алған ҡыҙ уға яңы исем ҡуша — Гөлбаныу) ҡалыуы, ә Ихсанбайҙың ҡаршы ярға сығыуы әҫәрҙең аҙағынаса дауам итә. Ах, нисек

teләй ул, нисә тапҡырҙар ынтылыштар яһап ҡарай ошо Гөлбаныу атлаған ярға сығырға. Ләкин һәр ваҡыт тормош йылғаһының тәрән ҡаршылыҡтарына осрай һәм әкренләп, йөрәге тартмаһа ла, үҙ хәле менән ризалашырға мәжбүр була, яҙмыш тәғәйенләгән ошо ярҙа бөтөнләйгә ҡаласағын аңлай. Ләкин, ниндәй генә хәлгә тарығанда ла, Гөлбаныуҙың булмышы уның күңелендә һәр ваҡыт камиллыҡты, тышҡы матурлыҡты ла, эске матурлыҡты ла баһалай торған үлсәм бирәмегенә әйләнә. Гөлбаныуҙы үҙенеке итә алмау уны мөйөшкә ҡыҫырыҡланған януар хәленә ҡалдыра һәм әкренләп үҙен уратып алғандарға асыуын сығара башлай.

Гөлбаныу һәм Ихсанбай. Бер әсәнән тыуып, йүргәктә саҡта уҡ айырылышып, аҙаҡ осрашып та бер-береһен туғандар итеп танымай, бергә уйнап үҫәләр. Ғашиҡ булышалар ҙа ҡабат айырылышалар. Икеһенең дә никахлашҡан кешеләре була тороп та, береһе енәйәтсел, береһе сараһыҙ рәүештә яҡынлыҡ ҡылалар. Балалары тыуа. Гөлбаныу үлә. Был икәүҙең бер туғандар икәнлеген белгән Фәүзиә-Барсынбикә лә сараһыҙ: серҙе сисеүгә икенсе сер ҡамасаулай. Башҡа барлыҡ геройҙар ҙа, образлыҡ дәрәжәләре, хоҡуҡтары менән был икәүҙән ҡалышмаһалар ҙа, улар тирәһендә әйләнә... Гөлбаныу үлһә лә, әҫәрҙең артабанғы өлөшөндә ул ҡыҙы Мәҙинә булмышында хәрәкәт итә. Мәҙинәнән тыш та, башҡа геройҙарҙың хәтерендә, телендә, күңелдәрендә әҫәрҙең аҙағынаса барып етә: Ихсанбайҙың илаһи иҫтәлектәре, аҙаҡ ғүмерлек үкенесе булып; Хашимдың, диуана Шәңгәрәйҙең мәңгелек мөхәббәттәре булып; әсәһе Фәүзиәнең мәңгелек ҡайғыһы булып; ауылдаштарының хәтерендә матурлыҡтың, камиллыҡтың ниндәйҙер үлсәм берәмеге булып.

Оло болғаныштар заманында йүргәктәге генә ҡыҙын юғалтып, шуны юллап ил ҡыҙырып йөрөгән Барсынбикә (хәҙер инде Фәүзиә) заман, дәүләт ваҡиғаларының ҡорбаны булып күҙ алдына баҫа. Әйтерһең, ул ҡыҙын түгел, ә хөкүмәт кимәлендәге ҡаңғырыҡтарҙан ышыҡ урын, йән тыныслығы эҙләй. Әҫәрҙә тере персонаж булып ҡатнашмаған, тауҙар артындағы ниндәйҙер хөкүмәт образынан йәшеренеп, беҙ уҡып күнеккән революцияға тиклемге уҫал байҙарҙан да уҫалыраҡ булып күҙ алдына баҫҡан ошо образ тырнаҡтарына эләкмәҫ өсөн исемдәрен алмаштырып, ҡаса-боҫа ғына эҙләйҙәр улар юғалтҡан ҡыҙҙарын. Табалар. Ләкин был хаҡта әйтергә Барсынбикәнең тәүәккәллеге етмәй. Сер таралыуы, уларҙың элекке арҙаҡлы байҙар икәнлеге асыҡланыуы һәм әлеге хөкүмәт образының уларҙың тотош тоҡомдарын юҡ итеүе мөмкин. Фәүзиә быны яҡшы аңлай, шуға ла күршеләрендә генә йәшәгән Гөлбаныу үҙҙәренең Күкһылыуы икәнлеген хатта иренән йәшерә. Бары тик етешһеҙ генә көн күргән ошо ғаиләгә, Гөлбаныуына инселәп, төрлө юлдар менән күстәнәстәр ебәртә башлай. Балалар ҙа һәр ваҡыт бергә уйнай, дуҫтарса аралашып үҫеп етә. Тик был аралашыу әкренләп оло мөхәббәткә әйләнә. Һәм бына Ихсанбайҙың беренсе тапҡыр ғашиҡтар булараҡ осрашыуға саҡырып яҙған хатын алып, билдәләнгән урынға ҡыуана-ҡыуана йүгергән Гөлбаныуҙың юлына әлеге Фәүзиә арҡыры төшә. Арҡыры төшөп кенә ҡалмай, бойороҡло тауыш менән башҡаса бер ҡасан да

Ихсанбай менән осрашмаҫҡа ҡуша. Фәүзиәнең был ҡылығы өс йүнәлештәге интрига тыуҙыра:

— Ихсанбай, бәй, әсәйем Гөлбаныуҙы ярата ине бит, һәр ваҡыт күстәнәстәр ебәртә ине, тип уйлай. Гөлбаныуҙың үҙенең ҡарындаш туғаны икәнлеген белмәй;

— Гөлбаныу менән дә шул уҡ хәл, был ҡарсыҡҡа минең ни зыяным тейҙе икән, уға ни ерем оҡшаманы, тип өҙгөләнә. Ул да Ихсанбайҙың үҙ туғаны икәнлеген белмәй;

— Әҫәрҙе уҡыусы ла: бер-береһенә күгәрсендәр кеүек кенә пар килеп торған егет менән ҡыҙҙың бәхетенә ниңә ҡаршы төшөргә икән был әбейгә, тигән һорауға төртөлә. Сөнки уҡыусы ла был икәүҙең игеҙәктәр икәнлеген әлегә белмәй.

Үҙенең сәйер ҡылығының сәбәбен ҡарсыҡ үҙе генә белә. Үкенескә ҡаршы, был интрига оҙаҡҡа һуҙылмай. Уҡыусы өсөн тиҙ үк асыҡлана: Фәүзиәнең хәтерләүҙәре аша беҙ был ике ғашиҡтың ҡарындаштар икәнлеген төшөнәбеҙ. Ә Ихсанбай менән Гөлбаныу өсөн был мәңгелек сер булып ҡала. Әлбиттә, беҙҙең өсөн дә Фәүзиәнең ошо балаларға ҡарата булған берсә үтә кире тойолған, берсә үтә ыңғай мөнәсәбәттәре, ҡырҡыу хәрәкәттәр, ҡылыҡтар, ваҡиғалар менән байытылып оҙаҡҡараҡ һуҙылһа, сер яуабы уҡыусы өсөн оҙаҡҡараҡ ваҡытҡа билдәле булмаһа, әҫәр тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ булыр ине кеүек. Әммә әлеге хәлдә лә был интрига үҙ бурысын ярайһы атҡара: уҡыусы "был хәлдең аҙағы ни менән бөтөр" тип көтә.

...Белгестәр иҫбатлағанса, беҙ күнеккәнсә, әҙәби әҫәрҙә интрига ниндәйҙер уй йомоуҙың тағатылыуы йә ниндәйҙер серҙең асылыуы ғына түгел. Романда булһынмы ул, әҙәбиәттең башҡа төр жанрындамы, һәр ҡырҡыу хәл-ваҡиға — көлкөлө, ҡурҡыныс, хәүефле, фәһемле, ғибрәтле — уҡыусы өсөн үҙенең дауамын таптыра. Уҡыусыны арбаусы, артабан уҡырға әйҙәп тороусы төп көс тә ошо хәл-әхүәлдең ни кимәлдә оҫта ҡуйылыуында. Уҡыусы: "Ә артабан нисек булды икән?" — тип, әҫәр менән мауыға. Ошо рәүешле арбаусы, әйҙәүсе энергия һала белмәгәндәр генә әҫәргә олоғара сер йомоусан. Был осраҡта уҡыусы автор оҫталығына артыҡ иғтибар ҙа итмәй, әлеге "ғәжәп" сер артынан ҡыуалай башлай. Таңсулпан Ғарипованың "ижади кухняһында" сере лә бар, серҙән башҡа ла арбаусы көстәре бихисап (ашы ла тәмле, соусы ла кәрәгенсә генә). Бигерәк тә роман кеүек оло жанрҙа теге йәки был ваҡиғаның иң ҡырҡыу урынында, көсөргәнешлек ҡайһылыр герой иҫәбенә бына-бына хәл ителә тип торғанда, ваҡиғалар күпмелер ваҡытҡа өҙөлөп торһа (әйтәйек, өс-дүрт бүлеккә), әлеге ҡырҡыу ваҡиғаның дауамын юллау көсө ғәйрәтле интригаға әйләнә. "Бөйрәкәй"ҙә лә оҫта файҙаланыла был алым. Әйтәйек, ҡасандыр ҡан дошмандар булған, беренсеһе икенсеһенән ғүмере буйы ҡасып көн күргән, ә икенсеһе тегеһен ғүмер буйы эҙләгән Әйүп Камалетдинов менән Барсынбикәнең осрашыуҙары. Улар табыша һәм бүлек тә тамамлана. Ә инде сюжетты йөкмәп килеүсе теге йәки был геройҙың кульминация алдынан ғына юҡҡа сығыуы (әйтәйек, демонстрацияланған үлем) һәм күпмелер ваҡыттан ҡабаттан пәйҙә булыуы — былдай күренештәр, әгәр психологик, логик яҡтан

йөйһөҙ башҡарылһа — бигерәк тә уңышлы алым. Романда, мәҫәлән, Барсынбикә менән улы Ихсанбайҙың ”үлеп ҡайтанан терелеүҙәре”. ”Үлем” эпизодтары ла бик серле ҡоролған. Ихсанбай алтын талап итеп, әсәһенә пистолет тоҫҡап тора; ҡапыл шартлау ишетелә; тик ни өсөндөр (?) әсәһе түгел, Ихсанбай үҙе ҡолай. Һәм бүлек бөтә. Ә киләһе бүлектәрҙә инде ауылдаштары был бик күркәм йорттан кескәй генә көл-күмер өйөмдәре ҡалғанлығын күрә. Һәм, әлбиттә, күпмелер ваҡыттан һуң әсәлеуллы был икәүҙең төрлө тарафтарҙа, төрлө сүрәттәрҙә, төрлө шарттарҙа ҡабаттан пәйҙә булыуҙары... Ысынлап та, автор романында ла, хикәйәләрендәге кеүек, теге йәки был дәүерҙең кеше яҙмышына йоғонтоло характер һыҙаттарын, үрҙә һаналып киткәнсә, оҫта тотоп ала. Һәм бер генә символик хәл-ҡылыҡ ярҙамында тотош панорама тыуҙырыуға өлгәшә. Хатта геройҙарҙың үлеме лә үҙҙәренең ғүмер юлын үткән саҡтарындағы ҡылған изгелектәренә, яуызлыҡтарына, ғөмүмән, булмышкөнкүрештәренә фәлсәфәүи-символик йомғаҡ итеп ойошторолған. Гүйә, кешеләр ғүмерҙәренең һуңғы аккордтарын бирә һәм был аккордта уларҙың донъя менән ниндәй мөғәмәләлә булғанлығы сағылып китә. Тап шуның өсөн дә, тыуым бер төрлө булһа ла, үлем төрлөсә. Тап мәҡәлдәгесә, һәр кемгә ғәмәленә күрә әмәле. Үкенескә ҡаршы, бәндә ғүмерендә бер генә тапҡыр була торған ошо үкенесле мәлгә көслө ассоциатив подтекст биреү тураһында уйланған башҡа прозаиктар башҡорт әҙәбиәтендә күренмәй. Александр Грин да бит бушҡа ”тормош, мөхәббәт һәм үлем” тип әйтмәгән. Тормош менән мөхәббәт башҡорт әҙәбиәтендә үҙҙәрен төп темалар итеп танытһалар ҙа, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, геройҙарҙың үлеменә бәйле ваҡиғалар йыш осраҡта үҙ ағышына ҡуйыла. Ә бит, тереләр үлгәндәрҙең күҙҙәрен йомдорған кеүек, үлгәндәр тереләрҙең күҙҙәрен асырға тейештер. Үлем талантлы автор ҡулында әҫәрҙә үткәрелгән фекергә кардиналь үҙгәрештәр бирерлек мөмкинлеккә әйләнә. Ошо тәңгәлдә, бәлки, ”герой үлеме” кеүек әҙәби сараға башҡа халыҡтар әҙәбиәтендә мөнәсәбәт нисек торғанлығына кескәй экскурс яһау кәрәктер. Әйтәйек:

1. Михаил Лакербай новеллаһынан... Атай кеше берҙән-бер улын алыҫ ауылға уҡырға ебәрә. Бер ай үтәме-юҡмы, атай кешегә сапҡын килә һәм улының шул ауыл малайҙары менән һуғышыуы, әлеге көндә үлем сигендә ятыуы тураһында хәбәр итә. Атын йән әсеүенә ҡыуалап, улы янына бара атай кеше. Хәл өҫтөндә ятҡан ул, атаһы килеп ингәс, үлемесле ауыртыныуҙарын еңеп, аяғүрә баҫа. Аяғүрә баҫҡан килеш йән бирә.

2. Акутагава новеллаһынан... Күперҙән алыҫ түгел урында егет һөйгән ҡыҙынмы, әллә башҡа төрлө символик бәхетенме көтә. Диңгеҙҙә һыу күтәрелеү башланған ыңғайға йылға һыуы ла күтәрелә. Бына һыу тубыҡтарына етә, биленә, муйынына. Ә егет ҡуҙғалмай, тап ошонда осрашырға вәғәҙәләшелгән... Һәм бына вәғәҙәһенә тоғро ҡалған үле самурай кәүҙәһе йылға буйлап ағып бара...

3. С.Айтматовтың ”Сыңғыҙхандың аҡ болото” әҫәренән... Сыңғыҙхандың оло ғәскәре теҙеүле тора. Ғәскәр алдында тубыҡландырылған дөйә үркәсе аша, ике кешене бер юлы аҫып үлтерер өсөн, ике осо ла

элмәкле арҡан һалынған. Ғәйепле кешенең береһе билдәле — ул Сынғыҙхандың бала тапмаҫҡа тигән бойороғон боҙоп, бәпесләргә тәүәккәлләгән йәш ҡатын. Ә икенсеһен — сабыйҙың атаһын белеүсе юҡ, тимәк, ҡотолорға ла тулы мөмкинлеге бар. Бына йәш ҡатындың муйынына элмәк һалына. Шул ваҡытта сафтар араһынан сабыйҙың атаһы сыға: "Мин!.." Икенсе элмәкте уға кейҙерәләр һәм ошо ике "гөнаһ эйәһен" йөкмәгән дөйә сүллеккә ҡыуалана.

Был үлем эпизодтарының һәр ҡайһыһында ла тәрән ассоциатив подтекст бар. Ирлек намыҫына тоғролоҡ, мөхәббәт тыуҙырған бурыстар алдында тоғролоҡ, ғөмүмән, беҙгә — тереләргә үрнәк булырҙай үлем ҡаршылау хәлдәре былар. Тәбиғи стихияға буйһонмаған үлем улар, ә хәрәкәттәге, батырлыҡ ҡылыу халәтендәге ниндәйҙер көс тарафынан атҡарылған акт түгел, "Бөйрәкәй"ҙә лә был хәлдәр авторҙың күҙ уңынан ситтә ҡалмай. Әлбиттә, улар тәбиғи стихияға буйһона, ләкин шул хәлгә бәйле ваҡиғалар геройҙарҙың үҙҙәренең йә уларҙы уратып алғандарҙың характерҙарын нығыраҡ аңларға булышлыҡ итә. Әйтәйек, Сибәғәттең үлемен... автор серле билдәһеҙлеккә төрөп, бер йөйһөҙ оҫта ҡороуға өлгәшкән. Йәш ҡатындың (Раузаның) ҡуйынынан ҡайтып килгән Сибәғәттең башына уй килә: ҡатынымды (Фәүзиәне) үлтерәм дә Раузаға өйләнәм. Шул уҡ ваҡытта, "... атай иҫәрләнә башланы, үткән йылдарҙағы серҙәрҙе асып ҡуймаһын" тип, Ихсанбай ҙа атаһы Сибәғәтте үлтерергә уйлай. Шул уҡ көндә киске аш табынындағы Фәүзиәнең уйҙары серле, ҡылыҡтары шикле. Ә таңға Сибәғәт үлгән. Был хәлдең декларатив рәүештә тәфсирләп күрһәтелмәүе уны үтемлерәк итә, әҫәрҙең мәртәбәһен, бәҫен күтәрә. Сибәғәткә ҡаҙылған ҡәбер ҙә бит кеше һөлдәләре өҫтөнә тап килә, һәм автор быны Сибәғәттең кеше һуйып йөрөгәнлеген тағы ла бер тапҡыр уҡыусы хәтеренә төшөрөп ҡуйыу мөмкинлеге итеп файҙалана. Ихсанбай, үҙен ҡотҡарған кешене үлтереп, донъя — ҡуласа икәнлеген хәтерҙәребеҙгә төшөрөп, үҙе үлтергән кеше һөйәктәре араһында һаташып йән бирә. Был деталдәр тәү ҡарауға ғына әҫәр өсөн бойомһоҙ тойолоуы ихтимал. Ә асылда уларҙа беҙ тормоштоң эсе хәҡиҡәтен күрәбеҙ: ни сәсһәң, шуны ураһың. Был донъялағы булмыштары — Сибәғәттеке кеше һөйәктәре өҫтөнә ҡоролманымы ла, Ихсанбай кеше яҙмыштары менән шаярманымы?! Теге донъяға күскәндә уларҙы "оҙатып" ҡалған кеше һөйәктәре тап шуға ишара ла инде. Ә Гөлбаныуҙың үлеме һуң? Уны бит бүреләр ашай. Үҙен яҡлай алмаған матурлыҡ тормошта һәр ваҡытта ла Ихсанбай ише "бүреләрҙең ҡорбаны"на әйләнмәйме һуң?! "Матур сәскәнең һабағы энәле булырға тейеш" тип өйрәтеп ҡарай бит Мәҙинәне атаһы. Ә Гөлбаныу был осраҡта, ысынлап та, энәләре булмаған гүзәл сәскә, яҡлаусыһыҙ етем. Үҙен ҡурсырға тейешле ире Хашимдан ул бер ҡасан да таяныс таба алмаған ҡатын. Йә булмаһа, Мөғлифә-баҡшының үлеме... Килер быуындарға күпме аҡыл, ғилем нуры сәсеп, үҙен тәрбиәләп, йыйыштырып китә ул фани донъянан.

Аллегорик характерҙағы параллелдәрҙең уңышлы файҙаланылыуы ла әҫәр эсенә һалынған матур биҙәктәр булып ҡабул ителә. Ихсанбайҙың күңел торошондағы, көнкүрешендәге үҙгәрештәрен ҡарт этәс хәле менән

һиҙелер-һиҙелмәҫлек кенә булһа ла сағыштырырға тырышыу мәрәкәрәк тойолһа ла, эте Күкбүре яҙмышы, ҡылыҡтары менән үткәрелгән параллель көслө эшләнелгән. Улар бер-береһенең образдарын тулыраҡ аңларға ярҙам итеп кенә ҡалмай, ә балҡытып ебәрә. Күкбүре Ихсанбайҙың үткән яҙмышын, әлеге ваҡыттағы күңел торошон, биләгән позицияһының нығыныуын йә ҡаҡшауын белдереп торған тәбиғи индикатор булып сығыш яһай. Әйтәйек, кем һуң Ихсанбай?

Әле сабый ғына сағынан уҡ үҙе йәшәргә тейешле бай, етеш мөхиттән мәхрүм ителгән. Тоҡомдан-тоҡомға күсеп килгән байлыҡтан, ғөмүмән, "тубылғылай, ...кесерткән тамырылай таралған" ырыҫлы тоҡомдан, тәғәйен яҙмышынан айырылған. Тамырҙарында тархандар ҡаны уйнаһа ла, гендарында буйһонмаусанлыҡ, башлыҡ булып етәкселек итеүгә дәрте ташып торһа ла, ирекһеҙҙең көнөнән күндәм, үҙ яҙмыштарына тулыһынса буйһонған ярлы-ябаға араһында шулар кимәлендә көн итергә мәжбүр. Ә Күкбүре һуң? Ул да бит көсөк кенә сағынан уҡ сараһыҙҙан үҙенең ырыуҙаштарынан айырыла, бүреләргә генә хас йәшәү рәүешен, тоҡомдаштары йәшәгән мөхитте юғалта. Бүреләр араһында йәшәргә ҡулайлашҡан тәбиғәте, булмышы менән, көс-таһыллыҡтары буйынса күпкә ҡайтышыраҡ булған ауыл эттәре менән аралашып йәшәргә мәжбүр. Икеһе лә — Ихсанбай ҙа, Күкбүре лә — ваҡыты-ваҡыты менән үҙ заттарына хас ҡылыҡтарын күрһәтеп алғылай. Икеһе лә үҙ заттарының асылдарына ынтыла. Яҙмыштарына, үҙҙәрен уратып алған, тәбиғәттәренә хас булмаған мөхиткә ризаһыҙлыҡтарын белгертергә була, Ихсанбай хандарса ҡыланғылап алһа, Күкбүре — бүреләрсә. Мәҫәлән, яҡын-тирәләге иң матур ҡатын-ҡыҙ, байлыҡ, халыҡ менән идара итеү эштәре мотлаҡ үҙенеке булырға тейеш тигәндәй ҡараштары, ә Күкбүренең, ауыл эттәрен мөрхәтһенмәйенсә, тоҡом дауам итер өсөн урмандан бүреләр араһынан пар эҙләүе — үрҙә әйткәндәргә аныҡ миҫал. Күкбүре бүреләр өйөрөнә ҡайтып ҡарай, тик ырыуҙаштары унан баш тарта, ҡыуа. Ихсанбай ҙа — кешеләрҙән, кешеләр Ихсанбайҙан баш тарта. Параллель шундай уңышлы атҡарылған, хатта урыны-урыны менән Күкбүре Ихсанбай асылының дауамы кеүек тә сығыш яһай. Мәҫәлән, игеҙәк сабыйҙарға ҡарата булған мөнәсәбәт: Ихсанбай уларға үҙ гөнаһының тере шаһиттарына, гөнаһтары емешенә ҡараған кеүек ҡарай. Уларҙың тиҙерәк үлеүҙәрен теләй, тиҙерәк үлһендәр өсөн хатта яңы быҙаулаған яңғыҙ һыйырҙарын хөкүмәткә тапшырттыра. Ә теге сабыйҙар үлмәй. Күкбүре, әйтерһең, Ихсанбайҙың кисерештәрен аңлай, уның теләген үтәй, ынтылыштарын еренә еткереп ҡуя: игеҙәктәрҙе быуып үлтерә. Иң ғәжәбе: ошо ике параллелдең үлеме. Күкбүре, януар була тороп, матурлыҡ, камиллыҡ символы булған Мәҙинәне ҡотҡарам тип һәләк була. Мәҙинәгә һөжүм итеүсе бүреләр менән алыша. Ә Ихсанбай, кеше була тороп, яуызлыҡтың, аламалыҡтың сигенә сығып, үҙе ҡасандыр үлтереп киткән Ишмөхәмәттең һөлдәләре араһында һаташып, был донъянан күсә. Әле ҡасан ғына, үҙе үлем сигендә ятҡан саҡта, ошо Ишмөхәмәт уны тәрбиәләп, аяҡҡа баҫырға ярҙам итмәнеме лә, һуңғы һыныҡтары менән бүлешмәнеме? Ә нисек баһаланы һуң Ихсанбай үҙен ҡотҡарыусыһының ярҙамдарын? Үлтерҙе, исемен алды, йор-

тона барып хужа булды. Гүйә, әле лә ул Ишмөхәмәттең һөлдәһе араһында ҡышҡы һалҡындан ҡотолорлоҡ йылылыҡ, бурандан һаҡланырлыҡ ышыҡ эҙләй... Күкбүре үҙ балаларын яҡлай, ҡурсалай — Ихсанбай үлтерә. Күкбүренең һуңғы ҡылығына хатта кешеләр һоҡлана. Ихсанбайҙы хатта йыртҡыстар ҙа ерәнеп ашамай — йөгөнөкләп ҡатып ҡалған был тере мәйеткә өйөрҙәге һәр бүре ярау итеп китә. Кешелекһеҙлектең сигенә сығып үлеү әшәкелеген Күкбүре үлеме фонында күрһәтә автор. Донъяға тыуым бер төрлө булһа ла, үлем хәлдәренең төрлөсә икәнлегенә баҫым яһай, иғтибарҙы йәлеп итә. Автор был тәү ҡарамаҡҡа сәйер хәҡиҡәтте тулы әселегендә асып һалған.

Башҡорт прозаһында Таңсулпан Ғарипова тәүге тапҡыр совет осорондағы ил етәкселегенең йыйналма образын, номенклатура образын тыуҙырҙы. Хәйер, ул образ бынан алда ла юҡ түгел ине, ләкин ул кейәү егете кеүек "бөхтә" булды, баш ҡоҙа кеүек "ғәҙел" сығыш яһаны. Ил халҡын "беҙ"гә һәм "улар"ға бүлде. "Партия и народ едины!" тип күпме генә тәкрарлаһалар ҙа, асылда ошо өндәмәлә үк номенклатура менән халыҡты айырым субстанция итеп күрһәткәндәрен аңламаныҡлар. Әҫәрҙә ул үҙе күренмәй, ә халыҡ араһындағы ышаныслылары аша манипуляциялар яһай. "Беҙ"ҙәрҙән берәйһе оҡшамаһа — Мәликә, Әптеләхәт йөҙөндә — Себергә һөрә, этапта барғандарҙың кемеһелер кешеләр һонған икмәкте алам тип ынтылғансы ғына ла — Павел һәм яңы тыуған сабый йөҙөндә — атып үлтерә. Халыҡты ҡол хәлендә тотоу өсөн ҡоролған колхоздарға "беҙ"ҙәр үҙҙәре сәсеп үҫтергән игенде "улар" ҡырып-һеперен алып китеп тора. Сәсеп үҫтергән игендәрен урып йөрөгән саҡтарында, урлашмайҙармы икән, тип кешеләрҙең тиҙәген тикшереп йөрөй — Ихсанбай йөҙөндә — һәм тикшерелгән тиҙәктән бойҙай бөртөгө табылһа, төрмәгә оҙата. Ит планы тулмай, тип етемдәрҙең (аталары һуғышта) һуңғы һыйырҙарын тартып ала. Ә план йылдың-йылы артты, сөнки ЦК "процент — 100" тиһә, обком "ниңә ваҡланырға — 150 булһын" тине. Райком был планды 180-гә еткереп, ауыл халҡына 200 булып барып етер ине. Юҡҡамы ни, хатта 37-се йылғы кешеләрҙе атыу планы Башҡортостанда өс тапҡырға арттырып үтәлде! Шуға ла бит илдәге миллионлаған ауыл халҡы бер ҙур "колхоз ГУЛАГ-ы" тотҡондары хәлендә булды.

— ...Тыңлаһаң, мин һиңә бер ҡарһүҙ һөйләр инем, — ти төп геройҙарҙың береһе Мәҙинә үҙенең әңгәмәсеһенә. — Бер илдә яман ҙур байлыҡҡа эйә батша йәшәгән, имеш. Бер заман ул алтындан карауат эшләткән һәм килгән бер ҡунаҡты шунда һалған. Мәгәр бер генә ҡунаҡҡа ла карауат таман булмаған: йә башы, йә аяғы һыймай, йә ҡыҫҡа, йә оҙон. Ҡунаҡты карауатҡа таман итер өсөн йә ҡырҡҡандар, йә һуҙғандар. Ҡыҫҡаһы, бында килгән бер генә ҡунаҡ та был батшалыҡтан тере килеш ысҡына алмаған... Мәҙинәнең ошо ҡарһүҙендә әлеге һибелмә образ беҙ танып белерлек символик һын ала.

Ошо алтын карауатҡа ятырға теләмәгәнгә лә бит, Камалетдинов атылып үлә, Әптеләхәт төрмәгә эләгә, Мәҙинә уҡыуынан ҡыуыла, — йәғни "ҡыҫҡарталар". Ошо карауатты тултырып ятырға эшкинмәгәндәрҙе "һуҙғылап ҡарайҙар": әйтәйек, шул уҡ Ғәлимәнең күрһәткестәренә

һөт өҫтәп яҙып... Ул ”алтын карауат”ка һыйғандары ла бит әле саҡ йөрөй:

— Һеҙ нисек эшләгәнһегеҙҙер — мин арыным, — ти колхоз рәйесе Саяф. — Ҡайһы саҡ бөтәһен күтәрә һуғып, чабан булып кашарға сығып олаҡкым килә. ...Суҫка фермаһында эштәр хөртәйҙе. Фураж юҡ, колхоз муйындан бурысҡа батты. Һөт кәмене — һыйырҙар һалам менән генә тора...

Ҡырҡыу сюжеттарға ҡоролған сағыу ваҡиғаларҙың күп булыуы тәү ҡарамаҡҡа әҫәрҙе сыбарлап ташлаған кеүек булһа ла, әҫәр — башҡорт роман жанрында яңылыҡ. Матбуғаттың башҡа төрҙәрендә, ижад эшенең бүтән өлкәләрендә киҫкен йөкмәткеле әҫәрҙәр күбәйгән осорҙа был күренеш бигерәк тә ҙур күләмле әҫәрҙәр өсөн, моғайын, төп талаптарҙың береһелер ҙә. Һәлкәү хәрәкәтле, тоноҡ ваҡиғаларға ҡоролған әҫәрҙәр бөгөнгө уҡыусы иғтибарын йәлеп итеүгә һәләтһеҙ. ”Бөйрәкәй” авторы хәлдең ошондай торошон яҡшы аңлап эш итә: пенталогия һәр ҡайһыһы айырым хикәйәләр булып сығыш яһай алырлыҡ, көслө йөкмәткеле, тығыҙ, етди эшкәртелгән бихисап сюжеттарҙан тора. Уларҙы ҡыҫҡаса теҙеп яҙып сығыуы ғына ла аяныс:

— Диңгеҙбай менән Барсынбикә. Арҙаҡлы тархандар тоҡомонан. Күпме байлыҡтарын, туғандарын юғалталар. Йәндәрен һаҡлап ҡалыу өсөн игеҙ сабыйҙарының һыңарын ташлап китергә мәжбүр булалар. Йөрәктәрендәге ҡайнаған үстәрен баҫыу өсөн, ҡанға-ҡан тип, кемдәрҙелер үлтерәләр;

— Бала ғына Әйүптең күҙ алдында атаһы менән әсәһен үлтерәләр;

— Ихсанбай, гөнаһы фашланыуҙан ҡурҡып, Гөлбаныуҙан тыуған игеҙәк малайҙарын Күкбүренән быуҙырып үлтертә;

— Әптеләхәттең күҙ алдында сабый ҡустыһын (ул үҙе лә бала ғына әле) бүреләр ашай, үҙе төптө осраҡлы рәүештә генә ҡотолоп ҡала;

— Хашим... һуғышта бер нисә тапҡыр үлеп-терелеп, ҡатыны Гөлбаныуҙы ни тиклем ныҡ яратканын, йәшәү ҡәҙерен аңлап, үткәндәре өсөн үкенеүҙән Гөлбаныу алдында тәүбәгә килерҙәй булып ҡайтып килгән сағында, үҙе һуғышта саҡта бүреләргә тарыған Гөлбаныуының баш һөйәген генә табып ала;

— Мәликә. Үҙе тыуғанда әсәһе үлә. Атаһы ташлай. Еҙнәһе көсләй. Ҡайғыларынан ҡаңғырып, осраҡлы рәүештә һөргөнгә юлыға...

Нәзәкәтле, тәрән эшкәртелгән, ҡеүәтле материалдар әҫәрҙе, һис шикһеҙ, уҡымлы итә, был тәңгәлдә авторҙы ҡотларға ғына ҡала.

Романға авторҙың хикәйәләр өлкәһендә эшләүҙәге оҫталыҡтары ла күсмәй ҡалмаған. Әйтәйек, хикәйә нескәрәк семәрҙәр талап итә икән, әлбиттә, ул биҙәктәр үҙ сиратына нәзәкәтлелек тә талап итә, һөйләмдәр һәм фекерҙәр төҙөклөгөнә айырым иғтибар һорай. ”Бөйрәкәй” һөйләмдәрендә лә тәү ҡарауҙан уҡ күҙгә ташланып торған сифат ошо бит. Шуға күрә лә әҫәр башҡорт әҙәбиәтендәге күп кенә ҙур күләмле әҫәрҙәрҙән үҙенең хикәйәләү теле — нәзәкәтле, биҙәкле, моңло теле менән айырыла. Монотон да түгел, тап тәбиғәт күренештәре кеүек — берсә ойоҫкота, берсә салт аяҙып китә, йә туңдыра, йә йылыға иҙрәтә. Һөйләмдәге һүҙҙәр мәғәнә, фекер йөкмәп кенә йөрөмәй, ә моң да, көй ҙә йөкмәп йөрөй. Әйткәндәй, моң-һағыш ”Бөйрәкәй” пенталогияһында

һөйләмдәрҙә, һөйләм теҙемдәрендә генә түгел, ә герой ҡылыҡтарының, тотош ваҡиғаларҙың айырылғыһыҙ компоненты булып оҙатып йөрөй беҙҙе. Әйтәйек, уҡыусы ҡот осҡос ярлы йәшәгән ғаиләлә һыйыр быҙаулағаны тураһында уҡый, уҡый ҙа, Мәҙинә менән бергә шатланып та өлгөрмәй — "налогығыҙ түләнмәгән" тип һыйырҙы алып китәләр; Һарайғырҙы иртәгә бәйгелә сабыштырам, тип ҡандай шатланып йөрөгән Хөсәйенде осратып, шатлығын бүлешеп өлгөрмәйһең — Һарайғырҙы атып киткәндәр... Башта әйтеп кителгән "ике яр" тигәндәй, ошондай ҡапма-ҡаршылыҡтар менән үтеп инә "Бөйрәкәй" әҫәре уҡыусы күңеленә — бәхет-ҡайғы, шатлыҡ-һағыш, өмөт-үкенес, мөхәббәт-нәфрәт...

Художестволы әҫәрҙең публицистик һәм документаль әҫәрҙән айырмаһы, байтаҡ күрһәткестәр рәтендә, тәүге сиратта хәл-ваҡиғаларҙың, эш-хәрәкәттәрҙең психологик яҡтан нигеҙле булыуы менән, геройҙарҙың ошо хәл-ваҡиғаларға психологик мөнәсәбәттәре һәм, йәмғеһе бергә, уҡыусы психологияһына туранан-тура тәьҫире менән билдәләнә. Әҙәби геройҙың характеры ойошҡанда ла төп компонент булып уның психологияһы һәм аҡылы ҡала. Герой теге йәки был эшкә ниндәй уй-тойғолар менән әҙерләнә, эш процесында һәм уны тамамлағас ниҙәр кисерә. Йәшеренбатырыны юҡ, башҡорт прозаһы күпселек осраҡта геройҙар кисерештәрен автор теле менән, йә геройҙың үҙенең уйҙары исеменән тәфсирләп һөйләп биреү менән сикләнер булды. Деталләштереп күрһәтеүҙәре лә "бит остары алһыуланып китте", "күҙҙәре баҙлап китте" тигәндәй, күп ҡулланыуҙан "еңел-елпе"гә әйләнеп бөткән ҡылыҡһырлауҙар ине. "Бөйрәкәй"ҙә хәлдәр нисегерәк һуң? Әйтәйек, Фәүзиә. Тәүҙә Гөлбаныуға күстәнәстәр ебәрттерә. Аҙаҡ, үҙенең улы Ихсанбай менән ошо Гөлбаныу араһындағы сағыу мөхәббәткә ҡаршы сығып, уҡыусы алдында үҙенә булған ихтирамды кәметә. Был ҡылыҡтарға аңлатма бирелмәй. Сәбәбен беҙ һуңынан ғына төшөнәбеҙ һәм Фәүзиә булмышының асылын тәрәнерәк аңлайбыҙ... А.Грин шундай күренеште бына нисек тасуирлай: ике ҡатын кәмәлә китеп бара, береһенең ҡурҡҡанлығы уның башҡаларға өндәшеүҙәре аша аңғартыла, ә икенсеһе шарт та шорт сәтләүек ярып бара. Әйтелмәһә лә, ҡурҡмағанлығы аңлашыла... "Бөйрәкәй"ҙә Сибәғәттең хәлен белешергә китеп барған Рауза, уның үлгәнлеген ишеткәс, иҫтән яҙып ҡолай. Был күренеш — Рауза-ның Сибәғәтте ни тиклем яратыуының көсөн күрһәтеүсе дәлил. Ни ҙә булһа аңлатып тороу кәрәкмәй. Виктор Розов яҙып сыҡҡайны бер саҡ: үрге оста йәшәгән егеттең үлеп ҡалғанын ишеткән түбәнге ос ҡыҙыҡайы үҙен-үҙе үлтерә. Был хәлгә бер төрлө лә аңлатма кәрәкмәй.

Ғөмүмән, теләһә ниндәй әҙәби деталь дә, интрига ла — ул үҙенә күрә сер. Серҙәрен алдан һөйләп күрһәтәме, аҙаҡтан һөйләйме, бөтөнләй һөйләмәй, ассоциациялар, тойомлатыуҙар менән аңғартамы — уныһы авторҙың шәхси мәйеле. Әлбиттә, сер алдан уҡ билдәле булһа, уның әүрәткес һәләте бүҫкәрә, уныһы бәхәсһеҙ. Ләкин әҙәбиәттә был юлды ла әҫәр мәнфәғәтенә килешле ҡулланған авторҙар бар. Ә Таңсулпан Ғарипова был алымдарҙың барыһы менән дә бер тигеҙ оҫта файҙалана...

Һүҙҙе йомғаҡлап, автор уңышының иң мөһим урындарын билдәләгәндә, ошондай теҙмә барлыҡҡа килер ине:

— символик образдарҙы, деталдәрҙе оҫта файҙаланыуы, хатта, төп геройҙарҙың хәрәкәттәренә, характер асылдарына фон булдырыу йәһәтенән, тотошлайы менән аллегорияға ҡоролған күренештәр тыуҙырыуға ирешеүе;

— төрлө йәштәге уҡыусыны ла телевизорҙағы триллерҙарҙан айырылып, мауығып уҡып китерлек ҡырҡыу ҙа, тәбиғи ҙә ваҡиғалар таба алыуы һәм уларҙы нәзәкәтле эшкәртеп, уҡыусы зиһенен ҡамаштырмаҫлык композициялар булдыра алыуы;

— башҡорт халҡының социализмда йәшәгән осорондағы етешһеҙ көнкүрешенә, аслыҡтан, фәҡирлектән ыҙаланыуына тәүгеләрҙән булып етди, ихлас иғтибар бүлеүе;

— башҡорт әҙәбиәтендә беренселәрҙән булып совет кешеләренең хөкүмәт ҡарарҙарындағы етешһеҙлектәрҙе аңлауын, уйҙарында ғына булһа ла ошо ҡарарҙар менән килешмәүен, мөсһөҙ генә булһа ла ҡаршылыҡтар күрһәтеүен сағылдырыуы;

— телгә иғтибарлы булыуы, телмәр менән генә кисерештәр, тойғолар, моң булдыра алыу һәләте...

...Талғын ауыл тормошона ғына хас характерҙар. Ошо тормошҡа күнеккән кешеләргә генә хас маҡсаттар. Ул маҡсаттар берҙән-бер һәм мәңгелек: бәхетле йәшәргә ынтылыу. Әлбиттә, был төпкөл башҡорт ауылы өсөн "бәхет" һүҙе лә, күп булһа, "ас йәшәмәү" һүҙе менән генә бәрәбәрҙер. Иң бәләкәй үлсәмдәр менән генә үлсәнәлер. Ләкин "астан үлмәҫкә" тигән кешенең ынтылыштары "бар донъяның байлыҡтары минеке булырға тейеш" тигән тиран ынтылыштарынан кәмме ни? Кәм түгел! Юҡһа, заманының иң бай кешеләренең береһе, Персия батшаһы Крез, батшалығын баҫып алған дошмандар уны язалау майҙанына алып барған ваҡытта батшалыҡ титулын икенсе кешегә тапшырып, донъя буйлап сәйәхәт итеп йөрөгән Солон һүҙҙәрен һағынып: "О-о, Солон! Һин ни тиклем хаҡлы булғанһың!.." — тип ҡысҡырмаҫ ине. (Солон уға бәхеттең байлыҡта ғына булмауы хаҡында һөйләй). Был тәңгәлдә бер нәмәне генә икеләнмәйенсә әйтергә мөмкин: һәр кемдең бәхете үҙенсә, тик уның иманға, итәғәткә таянғаны һәм үҙ халҡың өсөн бойомло булғаны ғына етди баһаға лайыҡ икәнлеген тәҡрарлай беҙгә "Бөйрәкәй". Был хәҡиҡәтте аңлаған һәр кем ошо бәхеткә өмөт-ышаныс менән йәшәй, шуға ынтыла.

Беҙ һүҙҙе романды тау йылғалары менән сағыштырыуҙан башлағайныҡ. Эйе, тигеҙлеккә ынтылыу ғына йылғаны ағырға мәжбүр итә, көсөн билдәләй. Мәле еткәс, ундай киң тигеҙ урын табыла. Романдағы ваҡиғалар ҙа шаулап ағып килеп, тигеҙлеккә төшөп, тынып ҡала. Ваҡиғалар күркәм, бәхетле күренештә тамамлана. Әкиәткә тартым, тиеүселәр табылыр. Тик ниңә әле беҙ үҙ шәмебеҙҙе үҙебеҙ өрөп һүндерергә тейешбеҙ?!

Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк: Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй" пенталогияһы башҡорт әҙәбиәтендә өр-яңы кимәл, өр-яңы бейеклек, өр-яңы түбәләрҙең береһе, шуның өсөн дә, башҡорт прозаһының киләсәкке үҫеше хаҡына, иң юғары баһаларға лайыҡ был әҫәр һәр яҡлап та етди, ентекле өйрәнелеүгә зарур.